*Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ*

## Беҙ — баймаҡтар бит әле

Эй аҡһаҡал, сал тарихтың
Йомғаҡтарын һүт әле,
Ирәндеккә — Йәнтөйәккә
Ҡарағастай тамыр йәйгән
Иң аҫаба, йор башҡорттар —
Беҙ — баймаҡтар бит әле!
Эй ҡорҙашым, хаҡ һүҙемде
Ҡолағыңа кирт әле,
Быуын-быуын булып үрсеп,
Милләтебеҙҙе ҡотайтҡан
Сая рухлы ырыуҙаштар —
Беҙ — баймаҡтар бит әле!
Эй яҡташым,аҫәрләнеп,
Моң-сазыңды сирт әле,
Урал ҡурайҙарын уйнап,
Бар ҡитғаны таң ҡалдырған
Йырға-моңға маһир заттар —
Беҙ — баймаҡтар бит әле!
Эй һыбайлы, һаҡмар буйлап
Бер елдереп үт әле,
Ат атланып, яуға сабып,
Ил дошманын еңеп ҡайтҡан
Ҡурҡыу белмәҫ азаматтар —
Беҙ — баймаҡтар бит әле!
Эй һылыуҡай, йәшен-ҡартын
Бейеп хайран ит әле,
Иң-иң сағыу йондоҙҙарҙы
Сәхнә күгендә балҡытҡан
Сәнғәткә ғашиҡ таланттар —
Беҙ — баймаҡтар бит әле!
Эй тыуған яҡ сәхрәләре,
Матур шул иҫ китмәле,
Шундай гүзәл илкәйемдең
Һәр бер тын алышын тойған
Хәстәрлекле бауырҙаштар —
Беҙ — баймаҡтар бит әле!
Әйҙә, күкрәп сәскә атһын
Дуҫлығыбыҙ түтәле,
Ошо дуҫлыҡ түтәленең
Мәңге шиңмәҫ сәскәләрен
Ел-дауылдан ҡурсыусылар —
Беҙ — баймаҡтар бит әле!

## Ирәндек

«Ожмахтарың әллә ҡайҙа торһон
Ирәндектә йөрөгән саҡтарҙа», —
Тип кинәнеп, күкрәк киреп йырлай
Йәше-ҡарты беҙҙең яҡтарҙа!
Мин үҙем дә ошо аҫыл көйҙө
Тыңлап үҫтем бала ваҡыттан,
Әле булһа, был йыр иҫкә төшһә,
Түбәм күккә тейә шатлыҡтан.
Йәштән йылы тойәк тойғанғамы,
Әллә артыҡ һөйгән өсөнмө,
Ирәндегем, йән дуҫымдай күреп,
Ҡат-ҡат әйтәм һинең исемде.
Үркәсеңә баҫып байҡағанмын
Һыҙылып атҡан мәлен ал таңдың,
Бөҙрә сәстәренән һыйпағанмын
Нескә билле йәп-йәш сауҡаңдың.
Һыйланғанмын балтырғаның
менән,
Һарынаңдан ауыҙ иткәнмен.
Һутлы үлән үҫкән биләнеңдә,
Көнгә янып, көтөү көткәнмен.
Күк кәкүктәр тауышын
тыңлағанмын,
Борма юлдарыңдан уҙғанда;
Ышығыңа барып һыҙынғанмын,
Күнәк-күнәк ямғыр ҡойғанда.
Таҡыя башлы ҡырлы ҡурайыңды,
Әүәҫләнеп, көйләп тартҡанмын;
Иркен болоноңда, ҡайыра һелтәп,
Ҡыршылдатып бесән сапҡанмын.
Йәштән йылы тойәк тойғанғамы,
Әллә артыҡ һөйгән өсөнмө,
Ирәндегем, йән дуҫымдай күреп,
Ҡат-ҡат әйтәм һинең исемде!
Саҡ бер айырылып ситкә китһәм,
Күңел ҡошо һиңә ашҡына,
Таштарыңды мин һалырҙай булам
Яҫтыҡ итеп башым аҫтына.
Армыт-армыт булып, олпатланып,
Тирә-яҡҡа биреп күркәмлек,
Болоттарға терәп ҡаҡ соңҡаңды,
Һәр саҡ мәғрур тор һин, Ирәндек!